**Башҡортостан республикаһы Иглин районының муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы**

**«Түбәнге Ләмәҙ ауылының урта дөйөм белем биреү мәктәбе»**

| «Килешәм» | «Килешәм» | «Раҫлайым» |
|---|---|---|
| ММО етәксеһе | Директор урынбаҫары: | Мәктәп директоры: |
| ____Дәүләтшина Г.З. | ____ /Аҙнабаева Ф.З.) | ______ Харунова Т.А. |
| «29 »08 .2025г. | «29»08.2025г. | «29»08.2025 г. |

**«Башҡорт теле» уҡыу курсының**

**эш программаһы**

**5-9 класс**

**Үтәлеү ваҡыты: 2025-2029й.**

**Төҙөүсеһе: башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы**

**Ишембаева Светлана Наил ҡыҙы**

## Башҡорт әҙәбиәтен уҡытыуҙың бурыстары

Төп дөйөм белем биреү мәктәбендә уҡыусы башҡорт балаларына башҡорт әҙәбиәтен уҡытыуҙың бурыстары түбәндәгеләрҙән тора:

1. Уҡыусының башҡорт әҙәби телен үҙләштереүенә, тексты аңлап, тасуири итеп, етеҙ уҡыуына, дөрөҫ яҙа белеүенә, әҙәби тел нормаларын һаҡлап, төрлө темаларға иркен һөйләшеүенә ирешеү.

2. Балаларҙы дөйөм башҡорт әҙәбиәте, халыҡ ижады, башҡорт халҡының йыр-музыкаһы, театры, һынлы сәнғәте менән таныштырыу, күренекле яҙыусылар һәм уларҙың әҫәрҙәрен үҙләштереүҙәренә ирешеү.

3. Халыҡ тарихын һәм мираҫын өйрәнеү аша уҡыусыларҙа Ватанға, халыҡҡа, туған телгә мөхәббәт, ололарға, кеселәргә һәм кешегә ихтирам, мәрхәмәтлелек, шәфҡәтлелек тәрбиәләү. Шулай уҡ хеҙмәт тәрбиәһе һәм эстетик тәрбиә биреү.

Был бурыстар, айырым-айырым күрһәтелһәләр ҙә, үҙ-ара тығыҙ бәйләнгәндәр. Улар берҙәм уҡыу-уҡытыу процесында ғәмәлгә ашырылалар, сөнки дәрестә белем биреү, шәхес формалаштырыу бергә бәйләп алып барыла.

Башҡортостан Мәғариф Министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән башҡорт әҙәбиәте буйынса “Төп дөйөм белем биреү буйынса өлгө программалар” Түбәнге Ләмәҙ урта дөйөм биреү мәктәбендә муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһының «Уҡыу планы»на ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыла.

## Башҡорт әҙәбиәтенән төп дөйөм белем стандарты.

Төп дөйөм белем баҫҡысында әҙәбиәтте өйрәнеү түбәндәге **максаттарға** ирешеүгә йүнәлтелгән:

- тиҙ үҙгәреүсән заман шарттарында файҙалы етештереүсән хеҙмәткә яраҡлы, үҙ-үҙен танып белергә һәм һәр ваҡыт камиллаштырырға әҙер, рухи донъяһы бай булған шәхес **тәрбиәләү**; гуманлылыҡ ҡараштары, милли үзаң, гражданлыҡ тойғоһо, патриотизм, әҙәбиәткә һәм халыҡтың мәҙәни ҡиммәттәрен яратыу һәм хөрмәт булдырыу;
- уҡыусыларҙа әҙәбиәттең үҙенсәлектәре тураһындағы ҡараштарҙы, әҙәби тексты ҡабул итеү, автор позицияһын аңлау, әҙәби процестың тарихи һәм эстетик нигеҙҙәренә төшөнөү, образлы һәм аналитик фекерләү культураһын, эстетик һәм ижади һәләтте, ҡыҙыҡһыныуҙы, әҙәби зауыҡты; телдән һәм яҙма һөйләмде **үҫтереү;**
- матур әҙәбиәт текстарын эстәлек һәм форма берлегендә аңлап ҡабул итеү, төп әҙәби-тарихи мәғлүмәттәрҙе һәм әҙәби-теоретик төшөнсәләрҙе **белеү**; әҙәби-тарихи процесс тураһында дөйөм ҡараш булдырыу;
- әҙәби-теоретик белемдәр нигеҙендә әҙәби әҫәрҙең тарихи-әҙәби ерлеген аңлап һәм тасуирлылығын бөтөн тулылығында ғына асыҡланыусы булараҡ анализлау; төрлө типтағы инша яҙыу; кәрәкле мәғлүмәттәрҙе (интернет селтәре аша ла) табыу, системалаштырыу һәм файҙаланыу **күнекмәләре** булдырыу;
- туған әҙәбиәттә һәм башҡа халыҡтар әҙәбиәттәрендә сағылыш тапҡан әхлаки идеалды үҙ-ара бәйләнештә аңлау һәм фекерләүҙәге уртаҡ һәм милли үҙенсәлектәрҙе асыҡлау.

“Әҙәбиәт” фәнен өйрәнеүҙең һөҙөмтәләре

Төп урта мәктәпте тамамлап сығыусы уҡыусыларҙың “Әҙәбиәт” фәнен өйрәнеү һөҙөмтәһендә алған **шәхси һөҙөмтәләре** түбәндәгеләр:

- шәхестең рухи-әхлаҡ сифаттарын камиллаштырыу, күп милләтле Ватанға һөйөү тойғолары, башҡорт һәм башҡа халыҡтарҙың әҙәбиәтенә ихтирам тәрбиәләү;
- танып белеү һәм коммуникатив мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн төрлө мәғлүмәт сығанаҡтарын файҙаланыу (һүҙлектәр, энциклопедиялар, Интернет-ресурс һ.б.).

Төп урта мәктәптә “Әҙәбиәт” фәнен өйрәнеүҙең **метапредмет һөҙөмтәләре** булып түбәндәгеләр тора:

- проблемаларҙы аңлай белеү, гипотеза ҡуйыу, материалдарҙы структураға һалыу, үҙ позицияһын иҫбатлау өсөн аргументтар һайлау, телдән йәки яҙма текстарҙа сәбәп-эҙемтә бәйләнештәрен билдәләү, һығымталарҙы формалаштырыу;
- эшмәкәрлекте үҙ аллы ойоштороу оҫталығы, уны баһалау, ҡыҙыҡһыныу сфераһын билдәләү;
- төрлө мәғлүмәт сығанаҡтары менән эшләү күнекмәһенә эйә булыу, уны табыу, анализлау, үҙ эшмәкәрлегендә файҙаланыу.

Төп урта мәктәпте тамамлаусы уҡыусыларҙа **фән һөҙөмтәләре** булып түбәндәгеләр тора:

1) танып белеү сфераһында:

- башҡорт халыҡ ижадында һәм башҡа халыҡтар фольклорында, боронғо әҙәбиәт вәкилдәренең, башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәрендә күтәрелгән төп проблемаларҙы аңлау;
- художестволы әҫәрҙең яҙылыу дәүере менән бәйләнешен аңлау, унда сағылған ваҡыт, әхлаҡ сифаттары һәм уларҙың бөгөнгө көн яңырыуын асыҡлау;
- әҙәби әҫәрҙе анализлай белеү, теге йәки был әҫәрҙең ниндәй жанр төрөнә ҡарауын билдәләү, темаһын, идеяһын, әхлаҡ пафосын аңлау, уның геройҙарына характеристика биреү, бер йәки бер нисә әҫәрҙең геройҙарын сағыштырып ҡарау;
- әҫәрҙең сюжетын, композицияһын, тасуири һүрәтләү сараларын билдәләү; әҫәрҙең идея-художество йөкмәткеһен асыуҙа уларҙың ролен аңлау (филологик анализ элементтары);
- әҙәби әҫәрҙе анализлағанда элементар әҙәби терминдар менән эш итә белеү;

2) ҡиммәт- ориентация сфераһында:

- башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәтенең рухи-әхләҡи ҡиммәттәре менән таныштырыу, уларҙы башҡа халыҡтарҙың рухи-әхләҡи ҡиммәттәре менән сағыштырыу;
- башҡорт әҙәбиәте әҫәрҙәренә ҡарата уҡыусыларҙың үҙ ҡарашын булдырыу һәм уларҙы баһалау;
- өйрәнелгән әҙәби әҫәрҙәргә үҙ интерпритацияһын булдырыу (айырым осраҡтарҙа);
- автор позицияһын аңлау, уға ҡарата үҙ ҡарашын булдырыу;

3) коммуникатив сферала:
- төрлө жанрҙарҙа яҙылған әҙәби әҫәрҙәрҙе аңлы итеп уҡыу һәм уларҙың йөкмәткеһен адекват ҡабул итеү;
- проза әҫәрҙәрен йәки уларҙың өлөштәрен текста ҡулланылған башҡорт теленең тасуири һүрәтләү сараларын һәм цитаталар ҡулланып һөйләй белеү;
- тыңланған йәки уҡылған текст буйынса һорауҙарға яуап бирә белеү, телдән төрлө текстағы монолог телмәр төҙөү, диалог алып барыу оҫталығына эйә булыу;
- өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең тематикаһы, проблематикаһы менән бәйле изложение, инша яҙыу, класта һәм өйҙә ижади эштәр, әҙәби һәм дөйөм мәҙәниәт темаларына рефераттар яҙыу;

4) эстетик сферала:
- һүҙ сәнғәте булараҡ әҙәбиәттең образлылыҡ тәбиғәтен аңлау;
- әҙәби әҫәрҙе эстетик ҡабул итеү, эстетик зауыҡ формалаштырыу;
- башҡорт һүҙҙәренең эстетик функцияһын, әҙәби әҫәрҙәрҙә художестволы образдар тыуҙырыуҙа тасуири һүрәтләү сараларының ролен аңлау.

## Уҡыу предметының йөкмәткеһе

1.**Тыуған илем – Башҡортостан** . Инеш дәрес. Ф.Ғөбәйҙуллина. “Башҡортостан флагы”.

2.**Алтын һуҡмаҡ.**С.Әлибаев. “Мәктәп юлы”. Я.Ҡолмой. “Мәктәп”. Я.Вәлиев. “Беренсе көн”. Р.Фәхретдинов. “Мәктәп”.

3.**Уйҙың күрке – тел, телдең күрке – һүҙ** . З.Биишева. “Башҡорт теле”. Ҡ.Аралбай. “ Башҡорт ҡоролтайына”. Р.Бикбаев. “Халҡыма хат”.

4.**Ил ҡеүәте – икмәктә** .Г.Юнысова.“Ер улына”. Д.Бүләков. “Ҡара икмәк”. Хикәйәләү тураһында. Ф. Чанышева. “Икмәк еҫе”. А.Вахитов “Өс бөртөк бойҙай”. Хикәйә тураһында. “Ил ҡеүәте – икмәктә” темаһына инша.

5.**Халыҡ ижады** . “Урал батыр” Батырҙар тураһында әкиәттәр. Ҡариҙел. Легенда тураһында. Бәйеттәр. Герман һуғышы бәйеттәре. Дон далаларында. Таҡмаҡтар тураһында. Кластан тыш уҡыу дәресе. К.Кинйәбулатова. “Уҡытыусым!”. Р.Шаммас. “Уҡытыусыға” Л.Яҡшыбаева. “Уҡытыусы – ул белем биреүсе”. Ф.Иҫәнғолов. “Уҡытыусы Ғүмәров”. “Яратҡан уҡытыусым” темаһына инша.

6.**Беҙҙең боронғо әҙәбиәтебеҙ** . Ҡол Ғәли. “Йософтоң матурлығы”. Табын ҡәбиләһенең ҡара табын ырыуы шәжәрәһе. Шәжәрә тураһында. Сәйф Сараи. Парсалар.

7.**Атай-олатайҙарҙың да төйәге** .Т.Йосопов. “Ай Уралым, Уралым”. Ж.Кейекбаев. “Урал тураһында ҡобайыр”. Н.Иҙелбай. “Салауат ташы”.

8.**Йырауҙар һәм сәсәндәр ижады.**С.Юлаев. “Ағиҙелкәй аға ҡая аралап…”. “Йырҙарҙан”. “Юлай менән Салауат”(эпостан өҙөк). М.Иҙелбаев. “Төш”. Р.Ғарипов. “Салауат батыр”.

9. **Башҡортостан – Гөлбостан…** Ш.Бабич. “Башҡортостан”. Ялыҡ Бурнаҡ улы. (“Һуңғы Һартай” әҫәренән өҙөк). З.Биишева. “Башҡортостан”. Н.Нәжми. “Башҡортостан”. Кластан тыш уҡыу дәресе.

10. **Һыҙҙырт, ҡурай, башҡорт моңдарын…** Башҡорт халыҡ йыры “Ҡурай”. Ҡ.Аралбай. “Йомабай ҡурайсы”. Н.Ғәлимов. “Яуҙан ҡайтҡан ҡурай” Артист, режиссер Ғәйфулла Сарбаев.

11. **Әсәй күңеле – тулы ҡояш** . А.Игебаев. “Әсәйемә”. Р.Ғарипов. “Әсәм ҡулдары”. Й.Солтанов. “Ҡәнәфер сәскәһе”.

12. **Башҡорт халыҡ экиәте** “Бер әсәнең зарыҡҡаны”. “Әсәм ҡулдары” темаһына инша.

13. **Яуҙа еңеп ҡайтығыҙ!** Ҡ.Даян. “Шайморатов генерал”. Ә.Бикчәнтәев. “Бөркөт һауала үлә”. Кластан тыш уҡыу дәресе. .Килмөхәмәтов. “Турайғыр”. Тыуған яҡ әҙәбиәтен өйрәнеү.

14. **Тәбиғәт донъяһында…** .Юнысова. “Талы бөгөлөп тора”. Ф.Ғөбәйҙуллина. “Умырзая”. А.Игебаев. “Сыйырсығым”. Р.Назаров. “Офоҡтағы ҡояш”. С.Яҡупов. “Ҡарабаш турғай”

15. **Туғандаш халыҡтар әҙәбиәте** .Ғ.Туҡай. “Шүрәле” Халыҡ ижады һәм әҙәбиәт. В.Бианки. “Ҡоторған тейен”. И.Йосопов. “Ҡара бүрек хаҡында һүҙ”. Үтелгәндәр буйынса тест һорауҙарына яуаптар алыу.

1. **М.Ямалетдинов.** “Көрәш кеше”

2.**Ғ.Дәүләди.** “Ҡоролтайға барам”

3. **И.Буракаев.**“Башҡорт көсө”

4. **Ғ.Хөсәйенов .** “Ете ырыу”. Тарихи хикәйә тураһында. Тарих буйынса парсалар. “Алдар батыр ҡиссаһы”. Телмәр үҫтереү. Инша “Алдар батырҙың алтын ҡынлы ҡылысы”. Кластан тыш уҡылған әҫәрҙәр буйынса әңгәмә.

5. **Б.Рафиҡов .** Тормошта бер нәмә лә эҙһеҙ үтмәй.“Эйәрләнгән ат” (тарихи фараз). Телмәр үҫтереү. Инша “Эйәрләнгән ат” әҫәрендә Аҡмал ҡарт һәм Салауаттың улдары образдарының асылышы”.

6. **Я.Хамматов** . Тормошо һәм ижады. “Төньяҡ амурҙары” романы.

7. **Башҡорт халыҡ ижады** . Йырҙар. Риүәйәттәр. Тарихи ваҡиғалар тураһында йырҙар. “Буранбай”, “Бейеш” йыры һәм риүәйәте. “Ҡолой кантон”, “Абдулла ахун”, “Тәфтиләү”. Ҡатын-ҡыҙҙар тураһында йырҙар. Риүәйәттәр һәм легендалар тураһында. Йырҙар тураһында. Телмәр үҫтереү. Инша “Тарихи йырҙар – халыҡ күңеленең көҙгөһө”. Кластан тыш уҡылған әҫәрҙәр буйынса әңгәмә.

8. **Ғ.Хөсәйенов** “Ҡурай”.

9. Сеңләүҙәр .

10. “Ерәнсә сәсән” (әкиәт) .

11. **Композитор Хөсәйен Әхмәтов**

12. **С.Юлаев** .“Тыуған илем”, “Уралым”. “Егеткә”. Импровизация һәм импровизаторҙар. Метафора тураһында төшөнсә. Телмәр үҫтереү. Инша “Сәнғәттә һәм әҙәбиәттә Салауат образы”, А.Кузнецовтың “Салауаттан һорау алыу” картинаһында батырлыҡты данлау. Кластан тыш уҡылған әҫәрҙәр буйынса әңгәмә.

13. **В.Зефиров** “Йәнтүрә хикәйәһе”

14. **М.Аҡмулла** .Аҡмулла шиғырҙары. “Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!”, “Дуҫлыҡ”, “Нәфсе”. “Аттың ниһен маҡтайһың?”, “Өлгөр һүҙ”.

15. **М.Ғафури** . М.Ғафуриҙың бала сағы һәм уҡыу йылдары. “Үҙем һәм халҡым”. “Мин ҡайҙа?”, “Гөлдәр баҡсаһында”. Шиғыр төҙөлөшө тураһында эпик һәм лирик әҫәрҙәр.

16. **Ш.Бабич** . “Салауат батыр”, “Зәки – Башҡортостан терәге”. “Ҡурайҡайға”. Ш.Бабич шиғырҙары тураһында. Телмәр үҫтереү. Инша “М.Ғафури һәм Ш.Бабич шиғырҙарында халыҡ образының сағылышы”. Кластан тыш уҡылған әҫәрҙәр буйынса әңгәмә.

17. **Д.Юлтый** .“Тимеркәй фәлсәфәһе”.

18. **Рәссам Ҡасим Дәүләткилдеев**

19. **Һәҙиә Дәүләтшина** . “Айбикә” Ҡатын-ҡыҙ образын һүрәтләү. “Айбикә” повесы тураһында. Әҙәби әҫәрҙә образдарҙың характерын асыу саралары. Портрет тураһында төшөнсә. Повесть тураһында төшөнсә. Юмор һәм сатира.

20. **Рәшит Ниғмәти** . “Йәмле Ағиҙел буйҙары” поэмаһы. Лиро-эпик поэмаларҙың үҙенсәлектәре тураһында. Телмәр үҫтереү. Инша “Ҡартлас Урал ни күрһә, шуны күргән Ағиҙел”

21. **Рәссам Әхмәт Лотфуллин**

22. **М.Кәрим** .“Айгөл иле” драмаһы. Телмәр үҫтереү. Инша “Айгөл иле” драмаһында Айгөл Ватанға һәм Әсәйгә булған һөйөүҙе, тоғролоҡто нисек аңлай?”

23. **Р.Өмөтбаев** . “Атлы башҡорт”. Телмәр үҫтереү. Инша “Генерал Кусимов. Башҡорттар китте һуғышҡа”.

24. **Ҡурайсы Ишмулла Дилмөхәмәтов**. Үтелгәндәр буйынса тест һорауҙарына яуаптар алыу

1.**Р.Бикбаев.** « Бөтә донья башҡорттары, берләшегеҙ». Ә. Моратов “Башҡортлоҡ” шиғыры.

2.**Ҡобайырҙар** . Ҡобайырҙарҙың поэтик үҙенсәлектәре. Сәсәндәр тураһында. “Ололар һүзе” кобайыры. Телмәр үҫтереү. Инша “Ай, Уралым, Уралым”, ” Салауат батыр” кобайырҙарында тыуған ерҙе һәм уның азатлығы өсөн көрәшкән батырҙарҙы данлау”. “Бейек тауҙың үлгәне” ҡобайыры. “Ил тигәндең кеме юк” , “Бер тигәстә ни яман ?”, Ҡобайыр тураһында төшөнсә. Әйтеш тураһында “ Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағош сәсәндең әйтеше”. Шафик Әминев – Тамъяни. Сәсәндең биографияһы. “ Урал” шиғыры. Шафик Әминев – Тамъяни. “Башкорт бабаларының” тарихы. Кластан тыш уҡыу дәресе “ Ярлыҡау” повесы буйынса.

3.**Мөхәммәт пәйғәмбәр “Ҡөрьән китабы”**. Р.Бикбаев “ Хәҙистәр”, “ Ҡөрьән сүрәләре”. Инша “Ожмах әсәйҙәрҙең табан аҫтында”.

4.**М. Кәрим** . М. Кәримдең тормош юлы һәм ижады тураһында. М. Кәрим “ Алыҫ юлға эйәрләйҙәр”, “Йәшәйһе бар” шиғырҙары. Кеше ғүмере, йәшәү мәғәнәһе. М. Кәрим. “Айһылыуҙың күҙ йәштәре”. М. Кәрим “Ҡоролтайға котлау”, “Үлмәҫ бай” поэмаһы. Телмәр үҫтереү. Инша “М.Кәримдең “Үлмәҫ бай” поэмаһы”/

5.**Ғәли Ибраһимов** . Ғәли Ибраһимовтың тормош юлы һәм ижады. “Кинйә” романында сағылдырылған осор,социаль – тарихи шарттар, халык тормошо һәм көрәшенең сағылышы. “Кинйә” романында башкорт ерҙәрен колонизациялау. Халыктың тормошо, көнкүреше. “Кинйә” романы. Халыҡты язалау тамашалары Кинйәгә нисек тәьҫир итә? Уның ауырыуы. Телмәр үҫтереү. Инша “Кинйәнең халык

мәнфәғәтен яклап көрәшеүе”. “Кинйә” романы. II китап. Телмәр үҫтереү. Инша “Әҫәрҙә Ҡинйәнең халыҡты яҡлаусы, етәкләүсе шәхес булып үҫеүе”.

6.**Бикбай Бикбай** . Б.Бикбайҙың биографияһы. “Ҡаһым түрә” драмаһы. Башҡорт халкының 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыуы һәм күрһәткән батырлыҡтары. “Ҡаһым түрә” драмаһында башҡорт халҡы менән урыҫ халҡы араһындағы дуҫлыҡ. Ҡаһым түрәнең тормошо һәм эшмәкәрлеге. Драмалағы төп образдар.Халыҡ образы. Реакцион офицерҙар образдары.Әҫәрҙәге төп конфликт. Б.Бикбай “ Ер” поэмаһы. Халыҡтың үҙ азатлығы өсөн алып барған ҡаһарман көрәше. “Ер” поэмаһында халыҡ һәм туған ер образарының кәүҙәленеше. Лирик герой. Әҙәбиәт теорияһы. Художестволы әҫәрҙең композицияһы тураһында төшөнсә. Хәтирә жанры тураһында. Артист А.Мөбәрәков ( үҙаллы укырға бирелә).

7.**Ғ.Сәләм** . Ғ.Сәләмдең биографияһы .“Шоңкар” поэмаһының темаһы, идея йөкмәткеһе. Ғ.Сәләм. Шоңкар. Инша “Әҫәрҙә кешенең яңынан тыуыу” темаһы. Поэтик синтаксис тураһында төшөнсә. “Шоңкар” поэмаһында төп образдар. Композиция үҙенсәлектәре, теленең образлылығы, байлығы. Поэтик синтаксис тураһында төшөнсә.

8.**З.Биишева**.З.Биишеваның тормош юлы һәм ижады. “Һөнәрсе менән Өйрәнсек” әҫәренең идея- тематик йөкмәткеһе. З.Биишева. “Һөнәрсе менән Өйрәнсек”. Һөнәрсе һәм Өйрәнсек образдары, художестволы эшләнеше. Телмәр үҫтереү. Инша “Яҡшылыҡ менән яманлыҡтың көрәше, ижади хеҙмәт шатлығы”.

9.**Н. Мусин** . Н. Мусиндың биографияһы. “Йыртҡыс тиреһе”. Әсәрҙә сағылдырылған осор тураһында. Йәмғиәттә хөкөм һөргән шәхес культы осоро эҙемтәләре, заманыбыҙҙың законһыҙлык, шәфҡәтһеҙлек күренештәре, фажиғәләре. Яуымбай менән Һолтанбайҙың ауыр яҙмышы. Йыртҡыслыҡ проблемаһын сағылдырған образдар.

10.**Р.Ғарипов** .Р.Ғариповтың биографияһы. “Һүҙем бар”, “Урал йөрәге” шиғырҙарында тыуған Башкортостан , уның тарихын, бөгөнһөн һүрәтләү. Р.Ғарипов “ Аманат” кобайыры. Р.Ғарипов “Уйҙарым”, “Кеше ғүмере”.

11.**Ғ.Хөсәйенов** . Ғ. Хөсәйеновтың биографияһы. ”Һуңғы тарпан” хикәйәте. Ҡырағай аттарҙың ҡырылыуы. Ғ.Хөсәйенов “ Һуңғы тарпан”. Хәзерге йылҡы малына шәфҡәтлерәк булырға, ҡәҙерләп үрсетергә, һаҡларга кәрәк.

12.**Р. Бикбаев** . Р. Бикбаевтың биографияһы .”Башкортостан бында башлана” шиғыры. “Йүкәләрҙән һығылып бал тамғанда” ш-ры. Р. Бикбаев “ Дауыл”, “Барып етһен ине

хаттарым” ш –ры. Р. Бикбаев “Йәншишмәбеҙ ошо тупраҡта” шиғыры. Инша. “Р. Бикбаев шиғрииәтендә Баш-н образы”.

13.**Т .Ғиниәтуллин**. Т .Ғиниәтуллиндың биографияһы “Мәтрүшкә еҫе” хикәйәһе. Әҫәрҙә ябай кешеләрҙең күңел күркәмлеге, эске донъяһының сафлығы. Т .Ғиниәтуллин “Мәтрүшкә еҫе” Хабибулла образы. Т .Ғиниәтуллин “Әсә һәм бала” хикәйәһе. Әҫәрҙең йөкмәткеһе, образдары. Т .Ғиниәтуллин “Әсә һәм бала” хикәйәһе. Телмәр үҫтереү. Инша “Әсә күңеле балала, бала күңеле далала”.

14.**Н.Нәжми** . Н.Нәжмиҙең биографияһы “Башҡортостан” шиғыры. Н.Нәжмиҙең “ Аҡ шишмә.”Тыуған Ер-әсәгә һөйөү тойғоһон сағылдырыу. Лирик герой образы.

15.**Ҡ. Аралбаев** . Ҡ. Аралбаев биографияһы. “Без кеше” поэмаһы. Телмәр үҫтереү. Инша “Ҡ.Аралбаевтың “Без кеше” поэмаһы”.

16.**Ф. Туғыҙбаев.** Ф. Туғыҙбаева биографияһы. “Аҡмулла” шиғыры. “Кыңгырау”поэмаһы.

17.**Ә.Әминев** . Ә.Әминев биографияһы. “Ҡытай – город” повесы.

18.**Р.Камал** . Р.Камал. “Таня – Таңһылыу”

19.**Х. Назар** . Х. Назар. “Башҡортостан – минең баш йортом”. Х. Назар. “Аҡҡа табыныу”, “Дауа”.

20.**Китап хаҡында хикәйәт.**

21.**Бөтә үтелгәндәрҙе ҡабатлау** . Тест һорауҙарына яуап. Уҡыусылар белемен баһалау. Кластан тыш уҡыу дәресе. Йомғаҡлау дәресе.

1.Инеш. Художестволы әҙәбиәт- һүҙ сәнғәте .

2. Халык ижады. Башҡорт халык ижады буйынса 7-8 кластарҙа алған белемдәрҙе ҡыҫҡаса ҡабатлау .

3. **Халык ижады**. Традицион жанрҙары. Башкорт халык ижады. Эпос йәки ҡобайырҙар. Халык иждадының сәсмә төрҙәре. “Урал батыр” эпосы. “Иҙеүкәй менән Мораҙым” әҫәре. Телмәр үҫтереү. Инша “Иҙеүкәй менән Мораҙым” әҫәре буйынса.

4. **Боронғо һәм урта быуаттар әҙәбиәте.**

**5. Болғар осоро әҙәбиәте.**

**6. Урта быуаттар әҙәбиәте.**

**7. 16-18 быуаттар әҙәбиәте** Йыраузар һәм сәсәндәр ижады. Йыраузар ижады. Сәсәндәр ижады. Ҡобағош, Ҡарас, Ерәнсә сәсәндәр. Байыҡ сәсән, Буранбай-Йәркәй сәсән, Ишмөхәмәт сәсән, Ғәбит сәсән. Үтелгәндәр буйынса тест һораузары.

8. **Салауат Юлаев** .Тормош һәм яу юлдары. Салауат Юлаев ижады. Халыҡ ижадында, әҙәбиәттә һәм сәнғәттә Салауат образы. Тарихи шәхес һәм әҙәби герой. Телмәр үҫтереү. Инша “Салауат Юлаев ижады”.

9. **18-се быуат** .Әҙәбиәттә йүнәлештәр. Тажетдин Ялсығол Әл-Башҡори. Ғәбдрәхим Усман. Тормошо һәм ижад юлы.

10. **19-сы быуат әҙәбиәт** . Һибәтулла Салихов. **Ғәли Соҡорой.** Тормош һәм ижад юлы. **Мифтахетдин Аҡмулла.**Тормош һәм ижад юлы. Аҡмулла шиғырҙары. Аҡмулла шиғырҙарының поэтик үҙенсәлектәре. Аҡмулла ижады буйынса инша. Йомғаҡлау буйынса тест һораузарына яуап алыу. **Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев.** Тормош юлы. М. Өмөтбаевтың ғилми-ағартыу эшмәкәрлеге.

М. Өмөтбаевтың әҙәби эшмәкәрлеге.**Ризаитдин Фахретдинов.** Тормош һәм ижад юлы. Р. Фахретдиновтың ғилми-ағартыу эшмәкәрлеге. Р. Фахретдиновтың әҙәби эшмәкәрлеге. Мәғрифәтселәр ижады. Телмәр үҫтереү. Инша “Мәғрифәтселәр ижады”.

11. **20-се быуат әзәбиәте. Сафуан Яҡшығолов** Тормошо һәм ижады. С. Яҡшығоловтоҡ ижадын өйрәнеү. **Фәткелкадир Сөләймәнов** Тормош һәм ижад юлы. Ф. Сөләймәновтың әҙәби эшмәкәрлеге. Ф. Сөләймәновтың “Салауат батыр” драмаһы. Ф. Сөләймәновтың ғилми-ағартыу эшмәкәрлеге. Тест һораузарына яуаптар. Үтелгәндәрҙе йомғаҡлау. Ҡабатлау. **Мәжит Ғафури** Тормош һәм ижад юлы. М Ғафуриҙың 1917 йылга тиклемге иҗады. М. Ғафуриҙың 1917 йылдан һуңгы әҫәрҙәре. М Ғафури. Шағирҙың алтын приискыһында. Әҫәрҙең композицияһы һәм сюжеты. Художество методы. Телмәр үҫтереү. Инша “М Ғафури ижады” Үтелгәндәрҙе йомғаҡлау. Ҡабатлау.

**Шәйехзада Бабич** Тормош һәм ижад юлы. Ш. Бабичтың башланғыс һәм 1914-1916 йылдарҙағы ижады. Ш Бабичтың февраль революцияһынан һуң яҙған әҫәрҙәре. Әҙәбиәт теорияһы. Шиғыр төҙөлөшө. Телмәр үҫтереү. Инша “Ш Бабич ижады”. Ш. Бабич ижадын йомғаҡлау. Үтелгәндәрҙе йомғаҡлау.

**Төп дөйөм белем биреү программалары эстәлегенә ҡуйылған мәжбүри талаптар**

**Мәктәптә өйрәнеү өсөн әҙәби әҫәрҙәрҙе һайлап алыуҙа төп талаптар** булып уларҙың художестволылығы, гуманистик эстәлеге, уҡыусы шәхесенә уңай йоғонто яһауы, уның үҫеш бурыстарына һәм йәш үҙенсәлектәренә тура килеүе, милли рух менән һуғарылыуы, шулай уҡ мәҙәни-тарихи традицияларға һәм белем биреү тәжрибәһенә нигеҙләнеүе тора.

Тәҡдим ителә торған әҙәби әҫәрҙәр тематик тәртиптә урынлаштырыла. Уҡыусыларҙың белемдәренә нигеҙләнә. Күрһәтелгән яҙыусылар һәм әҫәрҙәр исемлеген программа авторҙары, тәрәндән өйрәнеү маҡсатынан сығып, киңәйтә ала.Әҙәби әҫәрҙәрҙең айырым темаларға төркөмләп бирелеүе менән бергә, унда индерелгән жанр формаларының сиратлашып килеүе лә бик мөһим. Программаға әҫәрҙәр киләсәк йәш быуынды мәрхәмәтле, шәфҡәтле, тыуған яҡ тәбиғәтен һаҡлаусы һәм яратыусы, кешелектең ыңғай сифаттарына эйә булған, милләт мәнфәғәттәрен яҡларҙай кеше итеп тәрбиәләү бурыстарын күҙ алдында тотоп һайланды.

Календарь-тематик пландың эстәлеген мәктәптә үҙләштерелергә, камиллаштырылырға тейешле дөйөм күнекмәләр, башҡорт әҙәбиәте курсы буйынса махсус белем һәм күнегеүҙәр тәшкил итә.

Башҡорт әҙәбиәте материалы еңелдән ауырға барыу принцибына ярашлы урынлаштырылды. Был класта фольклор әҫәрҙәренән һуң башҡорт яҙыусылары һәм шағирҙарының туған тел, тыуған ер, дуҫлыҡ тураһында әҫәрҙәре өйрәнелә.

Халыҡ ижадының программаға ингән бай йөкмәткеле әҫәрҙәре халыҡ тормошон, көнкүрешен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, әхлаҡ нормаларын, азатлыҡ өсөг көрәшен, патриотизм һәм халыҡтар дуҙлығы тойғоларын, эстетик ҡараштарын сағылдырып, гармоник үҫкән шәхесте формалаштырыуға хеҙмәт итәләр.

Уҡыусыларҙың йәш үҙенсәлектәрен иҫәпкә алыу: а) ҙур күләмле әҫәрҙәрҙе ҡыҫҡартып биреү; б) башҡорт халҡының милли үзенсәлектәре, традициялары, ғөрөф-ғәҙәттәре киңерәк урын алған, милләттең рухи-мәҙәни асылы тулыраҡ сағылған әҫәрҙәргә йөҙ тотоу; в) башҡорт һәм рус әҙәбиәттәрен сағыштырып өйрәнеүгә килтерҙе.

“Ил ҡеүәте – икмәктә” бүлегендә Ә.Вахитовтың “Өс бөртөк бойҙай” хикәйәһе 5 класта өйрәнелгәнлектән, был класта Р.Солтангәрәевтең “Эшләп ашаһаң” хикәйәһе менән алмаштырылды.

**Әҙәби әҫәрҙәрҙе танып белеү буйынса төп эш төрҙәре.**

1. Төрлө жанрҙағы әҙәби әҫәрҙәрҙе аңлау һәм ижади уҡыу;
2. Тасуири уҡыу;
3. Ҡабатлап һөйләүҙең төрлө төрҙәре;
4. Шиғри текстарҙы йәғни сәсмә әҫәрҙән өҙөктәрҙе яттан өйрәнеү;
5. Уҡыған әҙәби текстың төрөн билдәләү;
6. Автор позицияһын һәм уны сағылдырыусы төрлө саралар урын алған тексты анализлау; геройҙарҙың теге йәки был эш-шөғөлдәренә нигеҙ булған мотивтарҙы һәм конфликтты асыҡлау;
7. Телдең тасуирлау сараларын һәм әҫәрҙә уларҙың идея-тематик эстәлеген асыу;
8. Бәхәстәрҙә ҡатнашыу, оппоненттарҙың фекерен иҫәпкә алып, үҙ ҡараштарынды раҫлау һәм дәлилләү;
9. Рефераттар, докладтар әҙерләү; әҙәби әҫәрҙәр һәм ирекле темалар буйынса инша яҙыу;
10. Урыҫ һәм башҡорт телендәге әҙәби әҫәрҙәрҙе сағыштырып баһалау.

**Төп дөйөм белем биреүгә талаптар**

Башҡорт әҙәбиәтен өйрәнеү һөҙөмтәһендә уҡыусыла булырға тейешле **белемдәр:**

11. һүҙ сәнғәтенең образлылығы;
12. өйрәнгән әҙәби әҫәрҙәрҙең эстәлеге;
13. классик әҙиптәрҙең тормош һәм ижад юлдарының төп факттары;
14. төп әҙәби-теоретик төшөнсәләр;

**күнекмәләр:**

15. әҙәби текстың эстәлеген һөйләп аңлатыу;
16. өйрәнелә торған әҫәрҙең айырым эпизодын (йәки күренеште)анализлау;
17. әҫәрҙең төрөн билдәләү;
18. әҙәби әҫәрҙәрҙе сағыштырып баһалау;
19. автор позицияһын асыҡлау;
20. әҙәби әйтелеш талаптарын һаҡлаған хәлдә өйрәнелгән әҫәрҙәрҙе (йәки өҙөктәрен) тасуири итеп уҡыу;
21. уҡыған әҫәргә дәлилле рәүештә үҙ мөнәсәббәтеңде белдереү;
22. әҙәби темаларға төрлө жанрҙа иншалар яҙыу;
23. Урыҫ һәм башҡорт телендәге әҫәрҙәрҙең уртаҡ һәм милли үҙенсәлектәрен билдәләү;

әҙәби һүрәтләү сараларын тейешенсә ҡулланып, башҡорт әҙәби текстарын урыҫ теленә һәм киреһенсә тәржемә итеү;

24. башҡорт һәм урыҫ телендәге әҫәрҙәр тураһында телдән һәм яҙма фекереңде белдереү, уларға баһа биреү.

Алған белем-күнекмәләрҙе **көндәлек тормошта ҡулланыу:**

25. башҡорт әҙәби теленең нормаларына нигеҙләнеп, кәрәкле темаға телдән һәм яҙма бәйләнешле текст төҙөү;
26. диалогта йә бәхәстә ҡатнашыу;
27. һүҙ сәнғәтенең айырым күренештәре менән танышыу һәм уларҙың эстетик ҡиммәтен баһалау.

**Ҡушымта**

**Белемде баһалау  системаһы һәм нормалары**

5-11  синыф уҡыусыларының башҡорт теленән һәм әҙәбиәттән белемдәрен баһалау
Уҡыуҙы баһалау
Уҡыусыларҙың 1 минутта уҡыу тиҙлеге түбәндәгесә билдәләнә:

| Синыфтар | Беренсе ярты йыллыҡта - Икенсе ярты йыллыҡта | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | Хәреф һаны | | Ижек һаны | | Һүҙ һаны | |
| 5 | 355-600 | 415-650 | 155-235 | 160-250 | 65-105 | 70-110 |
| 6 | 415-650 | 445-700 | 160-250 | 170-270 | 70-110 | 75-115 |
| 7 | 445-700 | 455-725 | 170-270 | 180-280 | 75-120 | 80-125 |
| 8-9 | 455-725 | 485-755 | 180-280 | 190-290 | 80-125 | 85-130 |
| 10-11 | 455-900 | 490-950 | 190-290 | 200-300 | 90-130 | 95-135 |

Иҫкәртмә:
Уҡыуҙың төп маҡсаты – текстың дөрөҫ уҡылыуына һәм эстәлеген аңлауға ирешеү;
Уҡыуҙы тикшереп баһа биргәнсе, уҡыусылар, баһалау нормалары менән таныштырылып, текст менән эшләү күнекмәләре алырға тейеш.

**Уҡыуға ҡуйылған талаптар һәм баһалау**

| № | Талаптар | Баһа |
|---|---|---|
| 1. | Шул синыфҡа талап ителгән күләмдәге һүҙҙәр тиҙ, асыҡ, дөрөҫ әйтелеп, фекер аңлайышлы бирелһә, йәғни:<br>- фонетик үҙенсәлектәр (хәрефтәрҙең уҡылыш үҙенсәлектәре) дөрөҫ бирелһә;<br>- башҡорт әҙәби теленең орфоэпик нормалары (һүҙҙең әйтелеш үҙенсәлектәре һаҡланһа;<br>- һөйләмдәр һөйләмдең төп структур киҫәктәренә дөрөҫ бүленһә;<br>- паузалар дөрөҫ яһалһа, һүҙ баҫымы һәм логик баҫым дөрөҫ уҡылһа;<br>- интонацион яҡтан текстағы һөйләмдәр дөрөҫ тауыш менән уҡылһа;<br>Уҡытыусының текст эстәлегенән сығып бирелгән һорауҙарына дөрөҫ яуап бирелһә; | «5» билдәһе ҡуйыла |
| 2. | Талап ителгән текстағы һүҙҙәр тейешле тиҙлектә уҡылһа, ләкин ҡайһы бер һүҙҙәрҙең әйтелешендә фонетик, орфоэпик үҙенсәлектәр тейешенсә үтәлмәһә, йәғни:<br>- ҡайһы бер һүҙҙәрҙе уҡығанда, һүҙҙәрҙең уҡылыш үҙенсәлектәре орфоэпик нормаларға тура килмәһә;<br>- һөйләмдең структур бүленешендә хаталар булһа;<br>- һөйләмде уҡығанда, интонацион яҡтан 1-2 хата булһа; | «4» билдәһе ҡуйыла |

| | | |
|---|---|---|
| | Уҡытыусыларҙың һорауҙарына дөрөҫ яуап бирелһә; | |
| 3. | Уҡыу тиҙлеге ваҡыт сигенә һыймаһа һәм уҡыу барышында 3-4 фонетик, 2-3 орфоэпик хата ебәрелһә;<br>Текст һөйләм берәмектәренә тейешенсә бүленмәү сәбәпле, интонация дөрөҫ бирелмәһә;<br>Һорауҙарға бирелгән яуаптарҙа хаталар булһа; | «3» билдәһе ҡуйыла |
| 4. | Тейешле тиҙлектә уҡыу күнекмәләре булмаһа;<br>Уҡыу барышында үтелгән орфорг.-ҙа хаталар күп ҡабатланһа;<br>Уҡыу барышында ебәрелгән фонетик, орфоэпик, интонацион хаталар текст эстәлеген аңлауға ҡамасаулаһа;<br>Текст эстәлеге буйынса бирелгән һорауҙарға өлөшләтә яуап алынғанда. | «2» билдәһе ҡуйыла |

**Уҡыу-уҡытыу методик комплекты һәм материаль-техник ҡулланмалар менән тәьмин итеү**

| № | Исемлек | Авторы | Нәшриәт | Баҫылған йылы |
|---|---|---|---|---|
| 1. | Башҡорт әҙәбиәте.Дәреслек-хрестоматия.5 класс<br><br>Башҡорт әҙәбиәте.Дәреслек-хрестоматия. 6 класс<br><br>Башҡорт әҙәбиәте.Дәреслек-хрестоматия. 7 клас<br><br>Башҡорт әҙәбиәте.Дәреслек-хрестоматия. 8 класс<br>Башҡорт әҙәбиәте.Хрестоматия.9 класс.<br>Башҡорт әҙәбиәте.Уҡыу ҡулланмаһы.9 класс. | М.Б.Юлмөхәмәтов М.Х.Иҙелбаев, А.М.Сөләймәнов<br><br>М.Б.Юлмөхәмәтов М.Х.Иҙелбаев, А.М.Сөләймәнов<br><br>М.Б.Юлмөхәмәтов М.Х.Иҙелбаев.<br><br>М.Б.Юлмөхәмәтов М.Х.Иҙелбаев.<br>Ғ.С.Ҡунафин,Ғ.Б. Хөсәйенов.<br>Ғ.С.Ҡунафин,М.Х. Иҙелбаев. | Өфө “Китап”<br><br>Өфө “Китап”<br><br>Өфө “Китап”<br><br>Өфө “Китап”<br>Өфө “Китап”<br>Өфө “Китап” | 2020 й.<br><br>2020й.<br><br>2020й<br><br>2020й<br>2017й<br>2017й |
| | Әҙәбиәт теорияһы | Ғ. Б. Хөсәйенов | Өфө “Китап” | 2010 й. |
| 2. | Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән традицион булмаған дәрестәр | М. И. Баһаутдинова, Н. Ғ. Йәғәфәрова | Өфө “Китап” | 2003 й. |
| 3. | Тел хикмәттәре | Ә. Бейеш | Өфө “Китап” | 1999 й. |
| 4. | Телдең күркәмлек саралары | В. Ш. Псәнчин | Өфө “Китап” | 2003 й. |
| 5. | Мәктәптә әҫәрҙе йөкмәтке һәм форма берлегендә өйрәнеү | Б. Б. Ғафаров | Өфө “Китап” | 1992 й. |
| 6. | Башҡорт әҙәбиәте мәсьәләләре | Кирәй Мәргән, Ғ. Б. Хөсәйенов | Өфө “Китап” | 1982 й. |
| 7. | Әҙәбиәт дәрестәрендә яҙма эштәр үткәреү | Б.Б.Ғафаров | Өфө, Башҡорт остан | 1984 |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | | китап нәшриәте | |
| 8. | Лирик әҫәрҙәрҙе өйрәнеү | Б.Б.Ғафаров | Өфө, “Китап” | 1996 |
| 9 | Әҙәбиәт уҡытыу методикаһы. | Б.Б.Ғафаров | Өфө, “Китап” | 2008 |
| 10 | Туған әҙәбиәт. 5 – се һәм 6 – сы кластарҙа методик күрһәтмәләр | М. М. Ҡолмөхәмәтова, И. Ә. Шарапов | | 2009 й. |
| 11 | Төп дөйөм белем биреү буйынса өлгө программалар | М.Б.Юлмөхәмәтов | Өфө, “Китап” | 2011 |

**Материаль-техник ҡулланмалар**

Интерактив таҡта
Ноутбук
Принтер